## IX-XI кластар өсөн башҡорт әҙәбиәтенән

## интернет-олимпиада һорауҙары

1. *Быуын-быуын үткәндә,*

*Хандар килеп киткәндә,*

*Хандан илгә ни ҡалды?*

*Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,*

*Ил таланып һаҙ ҡалды,*

*Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды. .*

*Олатайҙар дихайға*

*Мәскәүгә баш эймәгән,*

*Яҡла тип, Аҡ батшаға*

*Юҡҡа тик ант бирмәгән!*

*Ай, ант, тигән, ант, тигән,*

*Антың йотма, тот, тигән,*

*Ярлыҡамаҫ ят, тигән,*

*Ятка анттан ҡайт, тигән.*

*Туғанға биргән аҡ антың*

*Менер аттай көт, тигән,*

*Ул ят тигән- кем, тигән?*

Был юлдарҙың авторы кем? Уларға ниндәй мәғәнә һалынған?

*2. “Друзья!*

*Гордитесь: весь мир*

*Узнает, сколь могуч башкир!”-*

тип кем ниндәй әҫәрендә әйткән?

3. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашыусы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары тураһында ниндәй йыр-риүәйәт беләһегеҙ?

4. Башҡорт яугирҙарын “Төньяҡ амурҙары” тип кем атаған һәм ни өсөн?

5. “Төньяҡ амурҙары” романында Йәнтүрә мәргәнлеге хаҡында ниндәй ваҡиға һүрәтләнгән?

6. 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан бөтә яугирҙарға ла ниндәй көмөш миҙал тапшырылған?

*7. Кипел бульвар в Париже так*
*Народа праздными толпами,*
*Когда на нем летал с ногойкою казак*
*Иль Северный Амур с колчаном и стрелой...*
– тигән шиғри юлдар авторы кем?

8. Бөйөк немец шағиры Гетегә башҡорттар нимә бүләк иткән? Ул хаҡта нимә беләһегеҙ?

9. 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған ниндәй башҡорт халыҡ йырҙарын беләһегеҙ?

10. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт яугирының ниндәй ҡоралдары булған?

11. Башҡорт ғәскәрҙәренең 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы хөрмәтенә Рәсәй батшаһы фарманы менән ҡайҙа һәм ҡасан мәсет асылған?

12. 1811-1812 йылдарҙа Ырымбур губернаһында бөтәһе нисә полк ойошторолған?

13. Фазыл Туйкиндың “Ватан ҡаһармандары” драмаһының төп идеяһы авторҙың тағы ниндәй әҫәрендә сағылыш тапҡан?

14. Фазыл Туйкиндың “Ватан ҡаһармандары” исемле драмаһында ниндәй ике дуҫтың яҙмыштары сағыла?

15. 1812 йылғы Ватан һуғышы темаһын Башҡортостанда ҡайһы ғалимдар өйрәнгән?

16. Буранбай менән Сәлимә хаҡында Я.Хамматовтың “Төньяҡ амурҙары” әҫәрендә ниндәй эпизод бар?

17. Абдрахман Аҡъегеткә яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн батша ниндәй бүләктәр биргән?

18. Б. Бикбайҙың “Ҡаһым түрә” исемле тарихи драмаһында Фольгнер образының сюжет үҫешенә ниндәй йоғонтоһо бар? Фольгнер ҡайһы милләт кешеһе булған?

19. 1812-1814 йылдарҙағы Ватан һуғышында башҡорттар, Рәсәй империяһында йәшәгән башҡа рус булмаған халыҡтарҙан айырмалы рәүештә, үҙаллы ғәскәри берәмектәр булараҡ күпләп ҡатнашҡандар. Ни өсөн?

20. Ҡаһымдың ҡатынының исеме кем?

## IX-XI кластар өсөн башҡорт теленән

## интернет-олимпиада һорауҙары

*Я.Хамматовтың «Төньяҡ амурҙары» романынан алынған өҙөктө иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Тексҡа анализ яһағыҙ.*

Өсөнсө башҡорт кантонына барырға генерал-губернаторҙан рөхсәт алып, Буранбай тыуған яҡтарын күреп ҡайтырға ниәтләнде.

Ул сәфәр сыҡҡас, ноябрь айы етеүгә ҡарамаҫтан, көндәр ҡабат йылы торҙо. Өсөнсө мәртәбә яуған ҡар иреп бөтөп, ер өҫтө кипте, батҡаҡлы юл таҡырайҙы. Наҙлы ҡыҙ һымаҡ күренгән күк, аҡһыл ҡара болоттарға бөркәнеп, ҡайҙалыр юғалыбыраҡ тора ла йәнә алсаҡланып йөҙөн аса. Көҙгө ҡояш, ер өҫтөн ныҡлап йылыта алмаһа ла, һалҡын нурҙарын һирпеп, күңелдә шатлыҡ хистәре уята, киләсәккә өмөт, сәм бирә һәм донъяла йәшәргә дәртләндерә һымаҡ...

Алыҫта, бик алыҫта, күҙ күреме етмәҫлек ерҙән күгәреп ятҡан ҡарт Урал тауы теҙмәләре аша уҙған ваҡытта Буранбайҙың күңел күтәренкелеге икеләтә артты. Ана, уң яҡта Эҫерташ. Һулда ҡуйы урман менән ҡапланған урындар ҙа, тауҙар теҙмәһе йәйелеп ята. Уларҙан арыраҡ, күрегеҙ, бына мин ҡайһылай, һоҡланығыҙ, тип әйтергә теләгән шикелле, күккә һонолған Ирәмәл төҫмөрләнә.

Уға текләнеп ҡарап килә торғас, Буранбай түҙмәне, боронғо башҡорт йырын йырлап ебәрҙе:

Алыҫтарҙан, ай, күренгән,
Ирәмәлкәй тауының аҡ ташы.
Ҡайҙа бармай, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй менән ат башы...

Ниндәй көслө, йән тетрәткес йыр! Халыҡ күңелен арбаған ғәзиз Ирәмәл, ысынлап та, маҡтауға һәм данлауға лайыҡлы. Ирек һөйөүсе, азатлыҡ өсөн көрәшеүсе батырҙар, уның итәгендә йыйылып көс туплағандар ҙа, Тыуған илен ҡурсалап, дошманға ябырылғандар. Ирәмәл тирәһендәге һәр нәмә: таш аҫтынан урғылып сыҡҡан Иҙел менән Яйыҡ, төрлө-төрлө ваҡ-ваҡ тауҙар теҙмәһе, бейек ҡая ташлы ярҙар, ҡуйы урмандар — барыһы-барыһы ла алыҫ ауыр үткәндәрҙе хәтерләй, ҡанлы бәрелештәрҙә ҡорбан булыусы ир-егеттәрен онота алмайынса башын һалындырып, халыҡ күңеленән мәңге юйылмаҫ моңдо һуҙалар кеүек.

Яҡшы ла атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын...

Йөрәк тетрәткес илаһи, көслө моң шауҡымы Буранбайҙы ярһытты. Гүзәл Урал тәбиғәтенең сихри моң тәьҫиренә арбалып килде-килде лә ул ҡурайын алды. Оҙон көй, ҡабаланмай барған ат һымаҡ, яй ғына урман өҫтөнән ағылды. Тауҙар геүләүе, йылғаларҙың сылтырап ағыуы, йәйрәп ятҡан туғайлыҡтарҙағы үләндәрҙең, япраҡтарҙың ҡыштырлауы, бер ҡасан да күҙ алдынан китмәгән көтөү-көтөү йылҡыларҙың дөбөр-шатыр сабышыуы, тағы әллә нисәмә төрлө серле тауыштар — барыһы ҡурай моңо менән бергә ағылған һымаҡ.

Ҡурай зарлана, һыҡтай, заяға уҙған ғүмерҙе йәлләп илай. Ләкин уның көйө тау-таштар араһында ғына яңғырауҙан ни файҙа? Көй һәм

йыр — халыҡ ҡанаты. Шуға күрә халыҡ алдында йырланырға һәм уйналырға тейеш ине был көйҙәр. Ауыр тормоштан ыҙа сигеүсе кешеләрҙе көрәшкә әйҙәргә, Салауаттай батыр булырға өндәргә тейеш уларҙы. Ә ҡурайсы һәм йырсы Буранбай, өңөнә инеп йәшеренгән иң аҡтыҡ мәхлүҡтәй, халҡынан айырылып, кордонда үҙ теләге менән йәшәй. Шул да булдымы егетлек!..

Танһығы ҡанғансы ҡурайҙа уйнап туҡталғас, Буранбайҙың күңеле көс еткеһеҙ ауыр тойғоларҙан бушанып, еңеләйеп ҡалғандай тойолдо. Бер аҙҙан һуң ярһыуы баҫылып, атын ҡабаландырҙы.

— Йә, малҡай, шәберәк атла! Былай яй барһаҡ, эш сыҡмаҫ!

Ҡурай моңо бөткәндән бирле, ҡуйы урман эсе тып-тын булып ҡалды, һәлмәк кенә юртып барыусы ат бышҡырыуы, дағаларҙың саҡ та соҡ таштарға бәрелеүе, ағастар араһындағы яңғыҙ тумыртҡаның һирәк-мирәк сыйҡылдауы ғына урман тынлығын әлдән-әле боҙа.

*Я.Хамматов «Төньяҡ амурҙары»*

1. Тексты ниндәй телмәр стиленә ҡарауын асыҡлағыҙ (әҙәби, публицистик, ғилми, фәнни-популяр).
2. Тексты телмәр тибын билдәләгеҙ (тасуирлау, хикәйәләү, хөкөмләү).
3. Текст ниндәй жанрға ҡарай (әҙәби әҫәрҙән алынған өҙөк, очерк, легенда, риүәйәт, иҫтәлек).
4. Тексты темаһы ниндәй?
5. Тексҡа исем бирегеҙ.
6. Текстағы бәйләнеш сараларын билдәләгеҙ (лексик, синтаксик һ.б.)
7. Тексты төҙөлөшө ниндәй алымдарға нигеҙләнгән (ҡапма-ҡаршы ҡуйыу, сағыштырыу; хис-тойғоно эҙмә-эҙлекле үҫтерә барыу, фекерҙе үҫтерә барыу; ваҡиғаларҙың йыш алмашыныуы, тәфсирләп бәйән итеү)?
8. Тексты лексикаһын күҙәтегеҙ:

- ҡабатлауҙарҙы күҙәтегеҙ (лексик, тамырҙаш һүҙҙәр, анафора, эпифоралар). Уларҙың ҡулланылышы нимәгә буйһондоролған?
- лексик һәм контекстуаль синоним йәки антонимдарҙы табығыҙ;
- перифраздар бармы, улар ниндәй маҡсат менән ҡулланылған?

- күп мәғәнәле һәм күсмә мәғәнәлә ҡулланылған һүҙҙәрҙе табығыҙ.
- архаизм, историзм, неологизм, терминдар бармы; ябай һөйләү теле йәки, киреһенсә, юғары стиль һүҙҙәре ҡулланылғанмы, ни өсөн?
- фразеологизмдарҙы табығыҙ, улар ни өсөн ҡулланылған?
- тасуирлау сараларына, телмәр фигураларына иғтибар итегеҙ (эпитет, метафора, сағыштырыу, йәнләндереү, гипербола, градация, оксюморон).

9. Текстың синтаксисы тураһында һеҙҙең фекерҙәр? (ябай йәки ҡушма, атама, эйәһеҙ, дөйөм эйәле; инверсия, өндәү, һорау һөйләмдәр; күп нөктә, һанап китеү, тура телмәр, диалог һ.б. ҡулланылышы).